*Һәр тулҡында дуҫлыҡ хисе йәшәй,*
*Һәр тулҡында ҡояш тирбәлә.*
**Рәшит Назар**

# Тулҡын

*№ 1 (67) сентябрь, 2018 йыл*



## БЫЛ ҺАНДА...

**Ләйсән Солтанова**
Туған телемдең хазиналары ......2
**Гүзәлиә Ғүмәрова**
Фольклор ынйыларын бөртөкләп йыйҙыҡ ........................................3
**Лидиә Динмөхәмәтова**
Студент тормошона аяҡ баҫтыҡ ..4
**Гөлиә Ерьесова**
Беренсе курстарға бар ишектәр ҙә асыҡ ..............................................5
**Ынйы Ирғәлина**
Беҙ бер бөтөн................................5
**Зилара Хәмитова**
Уҡытыусы – ниндәй гүзәл исем...7
**Илһам ҡанаттары**.......................8
**Ял итәйек бергәләп**...................10







# ТУҒАН ТЕЛЕМДЕҢ ХАЗИНАЛАРЫ

Күптән түгел Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты студенттары Башҡортостаныбыҙҙың төрлө районында диалектологик практика үтте. Маҡсатыбыҙ – башҡорт теленең диалекттарын, һөйләштәрен, халҡыбыҙҙың тел байлығын ғилми яҡтан өйрәнеү өсөн материал туплау. Практика барышында студенттар, дүрт төркөмгә бүленеп, Баймаҡ, Ғафури, Ейәнсура һәм Салауат райондарында туған телебеҙҙең хазиналарын йыйҙы, халҡыбыҙҙың рухи байлығын өйрәнде. Төрлө төбәктәрҙән йыйылған студенттарға республикабыҙҙың башҡа райондарын барып күреү, урындағы халыҡ менән танышыу, аралашыу, йәнле һөйләш өлгөләрен йыйыу айырыуса оҡшаны.

Практика ваҡытында беҙгә күренекле тюрколог, телсе ғалим Жәлил Кейекбаевтың, башҡорт халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың йорт-музейҙарында булыу, “Урал батыр” эпосын яҙып алған урынды күреү; хозур тәбиғәте, бейек ҡаялары, саф һыулы Еҙем йылғаһы, тәрән мәмерйәләре менән дан тотҡан «Еҙем» тәбиғәт паркының географик объекттары һәм топонимдары менән яҡындан танышыу бәхете тейҙе.



Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә алған тәьҫораттар йөрәгебеҙҙең иң түрендә яҡты бер нур булып, мәңгелеккә уйылып ҡалды. Практиканан беҙ үҙебеҙгә ҙур тәжрибә, онотолмаҫ хәтирәләр, белем, бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрт алып ҡайттыҡ!

Әлбиттә, беҙҙең диалектологик практика быһың менән генә тамамланманы. Уның икенсе этабында, университетыбыҙға ҡайтып, тупланған материалдарҙы эшкәрттек, ғилми һығымталар яһаныҡ, аудиояҙмаларҙы ҡульяҙмаға күсерҙек. Яңы уҡыу йылы башында йомғаҡлау конференцияһы уҙҙы. Студенттар докладтар, презентациялар менән сығыш яһаны, стенгазеталар күргәҙмәһе ойошторолдо. Өйрәнгән һөйләш үҙенсәлектәрен ҡулланып, практика барышында булған иң иҫтәлекле ваҡиғаларҙы, йолаларҙы сәхнәләштереү – был сараның иң сағыу һәм йәнле өлөшө булғандыр.



Диалектологик практика ваҡытында ошондай һығымталарға килдек: бөгөнгө башҡорт тел ғилемендә диалекттарҙы һаҡлап ҡалыу иң актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Әйткәндәй, практика беҙҙең уҡыу йортонда йыл һайын үткәрелеп тора. Башҡорт филологияһы факультетында күп йылдар буйына тупланған диалектологик материалдар бар. Улар ғилми тикшеренеү эштәренә сығанаҡ була ала. Тимәк, беҙҙең эшебеҙ башҡорт тел ғилеме өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Ошондай фәһемле лә, файҙалы ла эште ойошторғандары өсөн М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның ректоры Р.М. Әсәҙуллинға, башҡорт филологияһы факультеты деканы, профессор Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситоваға, башҡорт һәм сағыштырма тел ғилеме кафедраһы мөдире Сәлимә Айбулат ҡыҙы Таһироваға, уҡытыусыларыбыҙ Гөлнур Харун ҡыҙы Бохароваға, Вадим Зәйнулла улы Толомбаевҡа, Зөләйха Әхмәт ҡыҙы Хәбибуллинаға, Рита Тимерхан ҡыҙы Аҡбулатоваға оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

Практика барышында мин халҡымдың шул тиклем алсаҡ, ҡунаҡсыл, ә телемдең бай, матур, бөйөк икәненә тағы ла бер тапҡыр инандым! Тик эш барышында урта һәм йәш быуындың күберәк рус телендә аралышыуы, ҡайһы бер ғаиләләрҙә балаларына туған телгә һөйөү һәм хөрмәт тәрбиә-

ләнмәүе күңелде ҡырҙы. Туған теленә, халҡындың тарихына, ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына битарафлыҡ халыҡтың юҡҡа сығыуына килтереүе бар. Шуға күрә лә урындағы һөйләш үҙенсәлектәренә иғтибарҙы арттырырға кәрәк.

**Ләйсән СОЛТАНОВА, 302-се төркөм**





# ФОЛЬКЛОР ЫНЙЫЛАРЫН БӨРТӨКЛӘП ЙЫЙҘЫҠ

2 июлдән 15 июлгә тиклем беренсе курс студенттары фольклор практикаһын үтте. Практика ике өлөштән торҙо: тәүгеһендә студенттар, ике төркөмгә бүленеп, Дыуан районының Мәрйәмғол, Арый, Ҡәҙер, Иҫке Хәлил, Салауат районының Арҡауыл, Малаяҙ, Дыуан-Мәсетле, Саҡмағош районының Рапат, Яңы Ҡото, Ҡалмашбаш, Тамъян, Имәнлеҡол ауылдарында бай мәғлүмәт тупланы. Икенсе өлөшөндә һәр кем, үҙ районына ҡайтып, фольклор өлгөләрен йыйҙы. Әйтергә кәрәк, был ауылдарҙа йыйылған фолькор материал үҙҙәренең үҙенсәлеге, тәрәнлеге һәм бай эстәлекле булыуы менән айырылып торҙо.



Практиканың төп маҡсаты – өлкән йәштәгеләр менән аралашып, төрлө легендалар, йолалар, хәтирәләр яҙып алыу һәм шул рәүешле башҡорт халҡының тарихы, йәшәйеше менән танышыу. Шулай уҡ студенттарҙың алдында уҡыу процесында алған белемдәрҙе нығытып, уларҙы практикала ҡулланырға өйрәнеү, кешеләр менән аралашыу серҙәренә төшөнөү, материалдар туплау һәм уларҙы билдәле бер системаға килтереү кеүек мәсьәләләр торҙо. Практика ваҡытында студенттар үҙҙәре өсөн генә түгел, халҡыбыҙ өсөн дә мөһим булған материалдар йыйыуға өлгәште.

Райондарға сығып, фольклор өлгөләрен йыйыу мөмкинселеге биргән өсөн университетыбыҙҙың ректоры Р.М. Әсәҙуллинға, факультетыбыҙ деканы Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситоваға, башҡорт әҙәбиәте һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире Ғәлимә Ғәлимйән ҡыҙы Ғәлинаға, уҡытыусыларыбыҙ Розалия Рәфҡәт ҡыҙы Баязитоваға, Гөлнур Мирза ҡыҙы Нәбиуллинаға, Гөлсинә Наил ҡыҙы Килмәковаға һәм Айтуған Йомабай улы Куланчинға ошо фәһемле практика өсөн ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.



**Гүзәлиә ҒҮМӘРОВА, 202-се төркөм**

# СТУДЕНТ ТОРМОШОНА АЯҠ БАҪТЫҠ

14 сентябрҙә беҙҙең факультетта иң мөһим һәм матур сараларҙың береһе – Студентлыҡҡа бағышлау кисәһе үтте. Ошо көндә беҙ үҙебеҙҙе ысын студенттар итеп тойҙоҡ. Башҡорт филологияһы факультетына уҡырға килеп, дөрөҫ һайлау эшләгәнебеҙгә тағы ла бер инандыҡ.

Студентлыҡҡа бағышлау сараһы бик ҡыҙыҡлы булды. Факультетыбыҙҙың студенттар активы беҙҙең өсөн күңелле ярыштар үткәрҙе. Иң тәүҙә беренсе курстың ике төркөмө араһында әҙәби конкурс ойошторҙолар: бөйөк мәғрифәтсебеҙҙең Мифтахетдин Аҡмулла һәйкәле янында “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” шиғырын яттан һөйләнек. Икенсе конкурста төркөм старосталарының иғтибарлы һәм ышаныслы кешеләр икәнлеге иҫбатланды. Арҡан тартыу ярышында ике төркөмдөң ҡайһыһы көслөрәк һәм етеҙерәк икәнлеге асыҡланды. Әйткәндәй, барлыҡ уйындар ҙа бик күңелле булды һәм, беҙ яҡшы, күтәренке кәйеф менән факультетҡа индек. Унда беҙҙе тағы бер һынау көттө. Берҙәм һәм дуҫ булғас, уны ла еңел үттек.



Факультетта беҙҙе хөрмәтле уҡытыусылар коллективы ҡаршы алды. Деканыбыҙ, филология фәндәре докторы, профессор Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситова барыбыҙҙы ла студент булыуыбыҙ менән ҡотланы һәм беренсе документыбыҙҙы – студент билетын тапшырҙы. Өлкән курс студенттарының сығыштары – Зәйдуллин Алмаздың башҡортса моңло итеп йырлауы, Сағынбек Ильястың ҡаҙаҡ телендә башҡарған йыры һоҡланғыс булды. Беренсе курс студенттары ла үҙҙәренең һәләтен күрһәтергә тырышты.



Мәҫәлән, 101-се төркөм егеттәре һәм ҡыҙҙары, гитараға ҡушылып, матур йыр башҡарҙы. Ғәниев Фәдистең ҡурайҙа өҙҙөрөүе, Әйүпова Әлфинәнең үҙе яҙған шиғырын уҡыуы барыһын да хайран итте. 102-се төркөм студенттары башҡарған Башҡортостан тураһында йыр, башҡорт бейеүе кәйефте күтәрҙе. Ғайсина Әлфиә һәм Ғәйфуллина Регина һөйләгән Рәми Ғарипов шиғырҙары рухландырҙы.

Беҙҙе студенттар рәтенә ҡабул иткән өлкән курстарға, сараны ойоштороусыларға, деканыбыҙ Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситоваға һәм факультетыббыҙҙың уҡытыусыларына ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Һеҙҙән өлгө алып, тырышып уҡырбыҙ, киләсәктә яңынан-яңы үрҙәр яуларбыҙ, тип ышанам.



**Лидиә ДИНМӨХӘМӘТОВА, 101-се төркөм**

# БЕРЕНСЕ КУРСТАРҒА БАР ИШЕКТӘР ҘӘ АСЫҠ

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты беренсе курс студенттарына 30 август көнө үк үҙ ишектәрен асты. Ни өсөн тигәндә, бына инде икенсе йыл студенттар активы тарафынан "Хәрәкәт" лагеры ойоштоҙола. Был лагерь беренсе курс өсөн бик кәрәкле, сөнки бында студенттарҙы алдан уҡ университет, төрлө түңәрәктәр, ойошторолған саралар менән таныштырҙылар, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирҙеләр. Иң мөһиме, ике көнлөк "Хәрәкәт" лагеры ҡыҙҙар һәм егеттәргә бер-береһе менән танышырға, дуҫлашырға һәм ваҡыттарын күңелле үткәрергә мөмкинселек бирҙе.



1 сентябрь – Белем көнөндә беренсе курс студенттары өсөн матур тантана булды. Беҙ, төрлө бейеүҙәргә ҡарап, моңло йырҙарҙы тыңлап һоҡландыҡ. Ҡыҙҙарҙың барабан уйнауы, күңелле флешмоб беҙгә дәрт өҫтәне һәм кәйефебеҙҙе күтәрҙе. Күккә шарҙарҙы осорғанда бер аҙ тулҡынландыҡ, сөнки үҙебеҙҙе ысын студенттар итеп тойҙоҡ. Ректорыбыҙ Р.М. Әсәҙуллиндың, байрамға килгән ҡунаҡтарҙың һәм уҡытыусыларҙың ҡотлау һүҙҙәре, изге теләктәре, кәңәштәре уҡыу алдынан күңелдәргә дәрт һәм илһам өҫтәне. Беҙҙең тәүге Белем көнө мәңгелеккә иҫебеҙҙә ҡалырлыҡ сағыу, фәһемле, һоҡландырғыс үткәне өсөн университет етәкселегенә, факультетыбыҙ деканы Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситоваға рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.



**Гөлиә ЕРЬЕСОВА, 101-се төркөм**

# БЕҘ БЕР БӨТӨН

Мин М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетында уҡыуым менән ныҡ ғорурланам, сөнки был факультет – ул ысын мәғәнәһендә бер ҙур һәм татыу ғаилә. Тап ошо факультетта уҡып, һәр кем талантын киңәйтә ала, үҙ юлын таба. Бының өсөн бында барлыҡ шарттар булдырылған. Әлеге көндә эшләп килгән төрлө түңәрәктәр студенттарҙы бейергә, йырларға, үҙеңде физик яҡтан камиллаштырырға, хатта шиғыр яҙыу серҙәренә төшөнөргә мөмкинселек бирә. Беренсе курс студенттары, был мөхиткә инеп, үҙҙәрен дә төрлө яҡтан аса башланылар.

"Студент көҙө – 2018" фестивале беҙҙең күңелдәргә мәңгеллеккә инеп ҡалды һәм студент тормошона ҡыйыу бер аҙым булды. Беҙ был яуаплы концертҡа ентекле әҙерләндек, сентябрь башынан алып көн һайын репетицияларға йөрөнөк, һәр номерҙы аҙағына тиклем еткерергә тырыштыҡ.



Бында, әлбиттә, концерт номерҙарын ҡуйыусыларҙың – өлкән курс студенттарының ярҙамы ҙур булды. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә улар

беҙҙең менән ун номер әҙерләне. *Беҙ – бер команда, беҙ бер бөтөн* тигән девиз аҫтында, ҡулға ҡул тотоноп, ҙур концертыбыҙҙы башлап ебәрҙек.



Был көндә БДПУ-ның залы бәхеткә, шатлыҡҡа һәм изгелеккә төрөнгән ине, сөнки концертыбыҙ барлыҡ кешеләрҙе, бер нәмәгә лә ҡарамайынса, бәхетле булырға саҡырҙы. Беренсе курс студенттары бар ҡунаҡтарҙы моңло йырҙары, дәртле бейеүҙәре, ҡыҙыҡ көләмәстәре, күңелгә үтерлек шиғырҙары менән һоҡландырҙы.



Сәхнәгә сығыу – өйрәнгән хәрәкәттәрҙе ҡабатлау ғына түгел, тамашасыларға күңелеңдең өлөшөн ҡалдырыу, үҙеңдең хис-тойғоларыңды еткереү ул. Тамашасыларҙың баҫып ҡул сабыуҙары, ихлас йылмайыуҙары, деканыбыҙҙың, уҡытыусыларҙың маҡтау һүҙҙәре – маҡсатыбыҙға ирешеүебеҙҙең күрһәткесе, тип уйлайым.



Беҙҙе дәртләндереп, кәрәкле кәңәштәрен биреп, беҙҙең өсөн борсолоп йөрөгән факультетыбыҙҙың деканы, филология фәндәре докторы, профессор Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситоваға, һәр ваҡытта ла беҙҙең эргәлә булған яратҡан кураторыбыҙ, тәрбиәүи эштәр буйынса декан урынбаҫары, өлкән уҡытыусы Гөлсинә Наил ҡыҙы Килмәковаға һәм ҙур сәхнәгә сығырға ярҙам иткән өлкән курс студенттарына рәхмәт һүҙҙәрен еткерәбеҙ.



Ынйы ИРҒӘЛИНА, 101-се төркөм

# УҠЫТЫУСЫ – НИНДӘЙ ГҮЗӘЛ ИСЕМ

“Уҡытыусы” һүҙе ниндәй генә телдә әйтелһә лә, оло хөрмәт һәм ихтирамға сорналып яңғырай. Һәр кемебеҙҙең йөрәгендә ул ҡәҙерле, ғәзиз кешеләребеҙ рәтенә ҡуйыла. Уҡытыусылар белем, мәҙәниәт, юғары кешелек ҡиммәттәре һәм идеалдары эйәһе булараҡ, изге миссияны намыҫлы башҡара, уҡыусыларҙы үҙ аллы ҡарарҙар ҡабул итергә, ижади һәләт, уй-фекерҙәрен үҫтерергә, үҙ-үҙенә ышанырға өйрәтә.



5 октябрь – уҡытыусыларҙың профессиональ байрамы. Беҙҙең факультетта ла был байрам һәр ваҡыт йылылыҡ һәм рәхмәт һүҙҙәре менән билдәләнә. Студенттар активы менән берлектә ошо моңһоу көҙгө көндө айырыуса күңелле, дәртле кәйеф менән һуғарырға тырыштыҡ. Иртән һәр бер уҡытыусыны факультетта йылы һүҙҙәр әйтеп,



ихлас ҡотлап, ҡаршы алһаҡ, артабан йыр-моңға, дәртле бейеүҙәргә, матур ҡотлау һүҙҙәренә тулған шәп концерт ойошторҙоҡ. Уҡытыусыларыбыҙҙың күңелендә был көн оҙаҡҡа иҫтә ҡалыр һәм һалҡын көҙҙәрҙә йылытыр, тип ышанабыҙ.



Хөрмәтле уҡытыусыларыбыҙ! Һеҙҙе байрамығыҙ менән ихлас ҡотлайбыҙ һәм намыҫлы хеҙмәтегеҙ, фиҙәкәрлегегеҙ, сабырлығығыҙ өсөн ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Һеҙгә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, Ағиҙелдәй оҙон ғүмер, аҡ бәхеттәр, эшегеҙҙә түҙемлек, уңыштар, яңы еңеүҙәр теләйбеҙ. Күгегеҙ аяҙ, тормошоғоҙ шатлыҡ-ҡыуаныстарға тулы, яҡындарығыҙ иҫән-һау булһын!



**Зилара ХӘМИТОВА, 301-се төркөм**

# ИЛҺАМ ҠАНАТТАРЫ

***

Низәр һөйләй һинең ҡараштарың?
Низәр көйләй һинең йөрәгең?
Бары хыял һинең арғымағың,
Борма юлдар – тыуған төйәгең.

Нисек һыйған һинең ҡарашыңа
Төпһөҙ океандар киңлеге?
Нисек йыйған ыҡсым йөрәккәйең
Тылсым, матурлыҡты, эй, егет?

Кемдәр назлай һине иртәләрен?
Кемдәр һөйләй һиңә әкиәт?
Ҡояш нурҙарынан иркәләнәм,
Әкиәт – йондоҙҙарҙан, тип әйт.

Ут ялҡыны йотҡан күҙҙәреңдә
Бар һағышы ята донъяның.
Ниңә, егет, күҙҙәремә ҡарап,
Минең тынлығымды урланың?

Ҡай арала килдең, әсир иттең?
Ҡай арала кире юғалдың?
Һинең шәүләң бары тороп ҡалды
Һулыштары булып ал таңдың...

***Динә СОЛТАНОВА, 302-се төркөм***

**Һинең йәшлек миңә күскән**

Фотолағы йәш сағыңды ҡарап,
Бөгөн, әсәй, бер аҙ иланым.
Һинең йәшлек миңә күскән, тиҙәр.
Кеше хаҡ әйткән, тип уйланым.

Тик мин һаман, ҡурҡаҡ ҡоралайҙай,
Ышыҡланам һинең ҡуйынға.
Йәшлегеңде алыу, ышан, әсәй,
Булмағайны хатта уйымда.

Маңлайыңа ятҡан бураҙналар
Тәрәнәйгән һайын нығыраҡ.
Беҙҙең хаҡта гелән борсолоуың,
Хафаланыуҙарың йышыраҡ.

Ҡыштың сафлыҡ бөрккән аҡ бәҫтәре
Һеңгән һайын ҡара сәсеңә,
Төшәбеҙҙер инде йылмайттырып,
Бер-бер артлы һинең иҫеңә.

...Ҡабатлаһам да һинең йәшлекте,
Башҡа юлдан китер яҙмышым.
Сөнки һиҙәм, һинең юлдан уҙһам,
Күтәрмәҫмен төҫлө барыһын.

***Әлфинә ӘЙҮПОВА, 101-се төркөм***

***

Ожмах, тиһегеҙ, ҡайҙа һуң ул?
Тимер түгел, күптән ҡорос бит...
Ҡорос ҡалып һеҙҙең күңелдәр,
Ә йөрәк – һүҙҙәр һатҡан кибет.

Яҡты ожмахтан тамуҡ ҡороу –
Ниндәй ҡағиҙә һуң, әйтегеҙ?!
Һуҡыр көйө йөрөү мәсеткә –
Батып бара тишек кәмәгеҙ.

Иң ҡиммәтле "иман" тиһегеҙ,
Тик һеҙҙең өсөн ул буш тауыш.
Етмәй кеүек һеҙҙең иштәргә
Тәрбиә тигән ҡаты ҡайыш.

"Халҡым хаҡына көрәш", имеш.
Ә кем халҡың? Кем һуң иманың?
Бәхәс ҡорма юҡҡа, бер заман,
Мине аңлап, бары иларһың...

Сөнки дин, рух, иман, яҡшылыҡ –
Барыһы шытҡан бер орлоҡтан.
Ояла күргән —осҡанда була.
Тик кешелек быны онотҡан.

Тыуған төйәкте "Әсәй" тигәс...
Улайһа, "Атай" була динем.
Һәм һеҙҙең ҡалып һүҙгә ҡаршы:
Ғаиләм була иманым, тинем!

***Әлфиә ҒАЙСИНА, 102-се төркөм***

***

Һин үҙең назлыһың, аҡыллыһың,
Нур тарата изге күңелең.
Хистәремде бикләр инем, әгәр
Белһәм һинең миңә түгелен.

Теләнең тик башҡа һөйөүсөнең
Баҡсаһында сәскә атырға,

Ҡыйыулығың етте мин төҙөгән
Һөйөү күперҙәрен ватырға.

Дөрләп янған һөйөү усағымды
Әйләндерҙең һүнгән күмергә,
Һине генә һөйөп, мәжбүр булдым
Хистәремде ергә күмергә.

Бала кеүек ябай күңелемде
Иҫләрһең һин айлы кистәрҙә,
Башҡаларҙан эҙләп тапмағанды,
Табырһың һин минең хистәрҙә...

...Башҡа менән ҡосаҡлашып берәй,
Әйтеп сихри, матур һүҙҙәрҙе,
Урамдарҙа мине күреп ҡалһаң,
Танырһыңмы ихлас күҙҙәрҙе?

Аҫтан ғына ҡарап йөҙҙәреңә
Һәм ҡарашты йүнәлтеп өҫкә,
Ауыр һулап, бары “Сәләм”, – тиеп,
Әйтермен мин оялып көскә.

Шул ваҡытта ярһыу йөрәгемә
Нурҙар өҫтәр изге күңелең.
Хистәремде бикләр инем, әгәр
Белһәм һинең миңә түгелен...

***Артур ҒАБДУЛЛИН, 501-се төркөм***

**Һағынғанмын...**

Һағынғанмын, һағынғанмын икән
Төйәгемде, тыуған ауылды,
Далаларҙы йыр-моңдарға күмгән
Ҡар буранын, елде-дауылды.

Һағындым мин тыуған яҡтарымдың
Күҙ йәштәрен-йылы ямғырын,
Күңелдәргә тиклем үтеп ингән
Тамсыларҙың көйләгән йырын.

Илһам өҫтәй минең йөрәгемә
Төйәгемдең үлән, япрағы,
Ауылыма ҡайтып бер тын алһам
Сәскә ата күңел тупрағы.

Һағынғанмын, һағынғанмын икән
Өйҙә көткән гәзиз әсәйҙе,
Ҡабатланмаҫ аш-һыу, икмәк тәмен,
Әсәй ҡойған хуш еҫле сәйҙе.

Донъялағы булған даръялар ҙа
Бер тиң түгел һиңә, төйәгем,
Ғүмеремә тоғро булып ҡалам,
Һиндә ятыр минең һөйәгем.

...Күктә йондоҙ балҡый, йоҡо килә,
Ҡәләмем дә ҡулымда һынған,
Ә мин яҙам: тыуған яҡтарымды
Һағынған шул йөрәк, һағынған.

***Артур ҒАБДУЛЛИН, 501-се төркөм***

**Көҙөм**

Һары көҙҙө быйыл ғәжәп
Яҙҙарҙан айырмайым.
Һөйөү тулы күҙҙәреңә
Ҡарауҙан арымайым.

Көҙҙөң тәбиғәте сағыу,
Елдәре йылы миңә.
Был елде лә, был мәлде лә,
Бүләк итәйем һиңә.

Йөрәгемдә яҙ йылыһы,
Йәй ҡояшы күңелдә.
Серле, моңло, алтын өс һүҙ
Яҙылған көҙ күгендә.

Баҡсалағы ваҡ йондоҙҙар
Безгә нурын тарата,
Улар әйтә емелдәшеп:
«Һуштан яҙып ярата!»

***Алина ӘХМӘТШИНА, 302-се төркөм***

**Кисә, бөгөн, иртәгә...**

Хыялдарҙа минең киләсәгем,
Уйҙарымда минең үткәнем,
Тыуған ергә, ауылыма булған
Мөхәббәттә минең бөгөнөм!

Күңелемдең сәскә атҡан мәле –
Кис етмәҫтән таңдар көткән саҡ.
Ғүмер үтеү менән тәрәнәйгән
Саф һөйөүем һиңә буласаҡ.

Бик яратам һине, ауылҡайым,
Һағыштарым һиңә илтәләр.
Ергә ятып,   елде тыңлағанда
Ауаз: кисә, бөгөн, иртәгә...

***Алина ӘХМӘТШИНА, 302-се төркөм***

# ЯЛ ИТӘЙЕК БЕРГӘЛӘП

**Горизонталь буйынса:** 3. “Абынмаҫ ерҙә абынма, (...)ың төшөр. 6. Ауыҙы юҡ – теше күп, көлтә һүтә – эше күп. 8. Ҡытай “коза ностраһы”. 9. Көндөҙ – хөрмәттә, кис – хеҙмәттә. 10. Тай йәшенә сыҡҡандан тәү ҡолонлағанға тиклемге бейә малы. 11. Балыҡтың “үпкәһе”. 16. Тауҙа үҫә торған ваҡ ҡына йомро ҡыяҡлы сөсө йыуа. 17. Сөсө ҡамырҙан йәйеп, ваҡ итеп ҡырҡҡылап, майға ҡайнатып бешерелгән ашамлыҡ. 18. Бал ҡорто менән иңкештең күҙәнәкле балауыҙы. 19. Һауаһыҙ бушлыҡ. 20. Дымлы урында үҫеүсе суҡ тамырлы бейек ҡаты ҡыяҡ үлән. 21. Самолеттар “гаражы”.

**Вертикаль буйынса:** 1. Ғәрәп телендә “диңгеҙ”ҙе аңлатҡан йылғаһыҙ һәм күлһеҙ дәүләт. 2. Был хайуандан бер миллион долларлыҡ ғәмбәр алып була. 4. Ағасы һайын ботағы, ботағы һайын ояһы, ояһы һайын балаһы. 5. Тартмаһына тары сәскән, татлыһына кинәнгән. 7. “Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр, эшең хаҡ булһа, (...)ң шат булыр”. 10. “Ҡул һелтәй, (...) саба”. 12. Ҡатын-ҡыҙҙың бейек түбәле, арҡаны тотош ябып торған, сулпылар менән биҙәлгән киң арҡалығы булған, тәңкә-мәрйенгә бөткән боронғо баш кейеме. 13. Ҙур ҡырылыш. 14. АҠШ-тағы штат. 15. Гекла йәки Этна. 16. Бер ҡап сәй.

| | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ■ | 1 | ■ | 2 | ■ | 3 | 4 | | 5 | | ■ |
| 6 | | | | | ■ | | ■ | | ■ | 7 |
| ■ | | ■ | | ■ | 8 | | | | | |
| 9 | | | | | ■ | | ■ | | ■ | |
| ■ | | ■ | | ■ | 10 | | | | | |
| 11 | | | | | | | ■ | | ■ | |
| ■ | | ■ | | ■ | | ■ | 12 | ■ | 13 | ■ |
| 14 | ■ | 15 | ■ | 16 | | | | | | |
| 17 | | | | | | ■ | | ■ | | ■ |
| | ■ | | ■ | | ■ | 18 | | | | |
| 19 | | | | | | ■ | | ■ | | ■ |
| | ■ | | ■ | | ■ | 20 | | | | |
| ■ | 21 | | | | | ■ | | ■ | | ■ |

***И.М. Ғәбитовтың “Башҡорт башваткыстар: кроссвордтар” китабынан***

*(Яуаптар киләһе һанда)*

**Баш мөхәррир:**
*Әлиә Шиһапова, 201-се т.*
*Телефон:* +79173897738
*e-mail:* aliya_shigapova@bk.ru
*vk.com/tulkynfbf*
*instagram.com/tulkyn_fbf*

**Мөхәрририәт:**
*Инсаф Хужабиргәнов,*
*1-се курс магистранты*
*Ләйсән Солтанова, 302-се т.*
*Әлфиә Ғайсина, 101-се т.*

•Ижади эш менән шөғөлләнәһегеҙ икән, гәзиттең ваҡытында сығыуын, йөкмәткеле һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә бай булыуын теләһәгеҙ, материалдарығыҙҙы мөхәрририәт ағзаларына килтереп биреүегеҙ һорала.

***• Мәҡәләлә килтерелгән факттар өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.***